## Аңлатма яҙыу

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-9 кластары өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән эш программаһы төҙөгәндә урта дөйөм белем биреүҙең яңы федераль дәүләт стандарттары, федераль һәм республика закондары талаптары, Мәғариф министрлығының ”Дәүләт белем биреү стандарттарының федераль компоненттарын раҫлау тураһында” Законы, «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы, Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы, Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған Башҡортостан Президентының 1999 йылдың 15 февралендәге Указы менән башҡорт теле республикабыҙҙа, рус теле менән бер рәттән, дәүләт теле итеп раҫланды. Ошо указға ярашлы һәм Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» законы нигеҙендә республика мәктәптәрендә уҡытыу һәм тәрбиә биреү концепцияһы төҙөлдө. Унда рус мәктәптәрендә туған телдәрҙе уҡытыуҙың мөһим проблемалары, бурыстары һәм юлдары билдәләнде.

**Программа кимәле:** базис.

**Уҡыусылар өсөн тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты**

5-се класс.

Хажин В.И.,Вилданов Ә.Х., Аҡҡужина Ф.Ә. Башҡорт теле; Рус мәктәптәренең 5-се класында уҡыусы башҡорт балалары өсөн дәреслек-Өфө: Китап,2017.

6-сы класс.

Хажин В.И.,Вилданов Ә.Х., Аҡҡужина Ф.Ә. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте; Рус мәктәптәренең 6-сы класында уҡыусы башҡорт балалары өсөн дәреслек.- Өфө; Китап, 2017-

7-се класс.

Хажин В.И.,Вилданов Ә.Х., Аҡҡужина Ф.Ә. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте; Рус мәктәптәренең 7-се класында уҡыусы башҡорт балалары өсөн дәреслек.- Өфө; Китап, 2017.

8-се класс.

Хажин В.И.,Вилданов Ә.Х., Аҡҡужина. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте; Рус мәктәптәренең 8-се класында уҡыусы башҡорт балалары өсөн дәреслек.- Өфө; Китап, 2017-

9-сы класс.

Хажин В.И.,Вилданов Ә.Х., Аҡҡужина Башҡорт теле һәм әҙәбиәте; Рус мәктәптәренең 9-сы класында уҡыусы башҡорт балалары өсөн дәреслек.- Өфө; Китап, 2017

**Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы:** Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған “Башҡорт теле һәм әҙәбиәте программаһы” (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-XI кластары өсөн ) төҙөүселәре: Тикеев Д.С., Толомбаев Х.А., Вилданов Ә.Х., Дәүләтшина М.С., Хөснөтдинова Ф.Ә., Хажин В.И. - Ижевск; издательство “КнигоГрад , 2008 йыл нигеҙендә төҙөлдө.

**Программа йөкмәткеһе 3 йүнәлештә төҙөлгән.**

1 Балаларҙы һөйләшергә өйрәтеү мөһим бурыс.
2 Тел менән әҙәби материал бергә ҡушып өйрәнелә ( интеграция).
3 Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә ( коммуникатив йүнәлеш).

.

Программаның нигеҙендә *коммуникативлыҡ* принцибы ята. Туған әҙәбиәт материалы еңелдән ауырға барыу принцибына ярашлы урынлаштырылды.Был кластарҙа фольклор әҫәрҙәренән һуң башҡорт яҙыусылары һәм шағирҙарының туған тел, тыуған ер, дуҫлыҡ, хеҙмәт, ил яҙмышы, азатлыҡ өсөн көрәш темаларына арналған иң күренекле әҫәрҙәре алынған.

**Программаға ҡуйылған маҡсат һәм бурыстар**

1.Уҡыусыларҙы башҡорт әҙәби телендә дөрөҫ һөйләшергә, өйҙә, йәмәғәт урындарында, хеҙмәт процесында башҡорт әҙәби телен практик файҙаланырға өйрәтеү.

2.Башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик нормалары буйынса белем һәм күнекмәләр биреү.

3.Башҡорт телендә нәшер ителгән гәзит-журналдарҙы, әҙәби китаптарҙы үҙ аллы уҡып аңлау күнекмәләрен биреү.

4.Үҙ фекереңде билдәле кимәлдә бәйләнешле итеп һөйләй һәм яҙа алыу күнекмәләрен формалаштырыу.

5.Балаларҙы башҡорт халҡының фәһемле тарихы,бай мәҙәниәте, сәнғәте,әҙәбиәте,йолалары, күренекле шәхестәре, Тыуған илдең тәбиғәте һ.б. менән таныштырыу,уларҙы башҡорт донъяһына алып инеү, башҡорт халҡына,уның теленә,үҙе йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.

**Уҡыу предметына дөйөм характеристика**

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте курсында предмет ярҙамында түбәндәге үҫеш юлдары тормошҡа ашырыла:

предмет кимәлендә белемгә эйә булыу;

уҡыу техникаһын үҫтереү, текстарҙы анализлау юлдарына эйә булыу;

яҙма һәм һөйләү телмәренә эйә ***булыу;***

тел һәм әҙәбиәт тураһында белем алыу һәм системалаштырыу;

орфография һәм пунктуацияны, морфологик категориялары һәм синтаксик төҙөлөшөн өйрәнеү;

башҡорт теленең тәрбиәүи потенциалын ҡулланыу;

9-сы класты тамамлаусы уҡыусы башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән түбәндәге компетентлыҡҡа эйә була:

фонетика һәм орфоэпия, башҡорт әҙәби теле, һүҙ төркөмдәре, ябай һөйләм һәм ҡатмарлы һөйләм төрҙәре, синтаксисы һәм пунктуация, морфология,һүҙбәйләнеш һәм һөйләм,һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Ябай һөйләм синтаксисы ,ҡушма һөйләм синтаксисы һәм пунктуация. Ҡушма һөйләмдең төрҙәре .Теҙмә һәм эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр.Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр, ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.Теҙмә ҡушма һөйләмдәге ябай һөйләмдәрҙе бәйләүсе теркәүестәр.

Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр, улар тураһында төшөнсә.

Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр. Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләрҙең икенән артыҡ ябай һөйләмдәрҙән тороуы. Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләрҙең төрҙәре.

9-сы класты тамамлаусы уҡыусы башҡорт әҙәбиәтенән түбәндәге компетентлыҡҡа эйә була:

Синтаксик- стилистик күнегеүҙәрҙе башҡарыу. Фольклор әҫәрҙәренән һуң башҡорт яҙыусылары һәм шағирҙарының туған тел, тыуған ер, дуҫлыҡ, хеҙмәт, ил яҙмышы, азатлыҡ өсөн көрәш темаларына арналған иң күренекле әҫәрҙәре үҙләштереү. Эпос, ҡобайыр, иртәктәр.

**Уҡыу предметының ҡиммәттәр йүнәлеше**

Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен өйрәнеү һөҙөмтәһенең бер йүнәлеше булып уҡыусылар тарафынан рухи ҡиммәттәрҙең системаһын үҙләштереү тора. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә түбәндәге рухи ҡиммәттәргә иғтибар бүлеү мотлаҡ.

**Изгелек ҡиммәте** - үҙеңде һанап бөтөргөһөҙ бәйләнештәрҙән торған донъяның бер өлөшө итеп тойоу, кешеләрҙең тел ярҙамында бер-береһе менән бәйләнеше әҙәплелекте таныуға нигеҙләнеүен аңлау.

**Аралашыу ҡиммәте** - аралашыуҙы йәмғиәттең, мәҙәниәттең әһәмиәтле бер өлөшө итеп таныу.

**Матурлыҡ (гармония) ҡиммәте** — башҡорт теле һәм әҙәбиәтенең матур, яғымлы халыҡ байлығы булыуын аңлап үҙләштереү.

**Хеҙмәт һәм ижад ҡиммәте** - хеҙмәт кешелек йәшәйешенең төп шарты, һәләте булыуын ҡабул итеү. Хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләүҙә уҡыу эшмәкәрлегенең әһәмиәте ҙур. Уҡыу эшмәкәрлеге барышында ойошҡанлыҡҡа, үҙаллылыҡҡа, яуаплылыҡҡа, хеҙмәтте һөйөргә өйрәнергә мөмкин икәнлеген аңлау.

**Ильөйәрлек ҡиммәте** - үҙ телеңде һәм халҡыңды хөрмәт итеү, халыҡтың йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнеү, ғаилә, ил алдында бәләкәйҙән үк яуаплы булыуҙы тойоп үҫеү.

**Кешелеклелек ҡиммәте** - үҙең һәм башҡалар өсөн яуаплылыҡ тойоу, кешенең йәшәү урыны булған тәбиғәтте һаҡлау кәрәклеген аңлау.

**Уҡыу предметы йөкмәткеһенең дөйөм ҡиммәттәргә ориентацияһы (йүнәлеше).**
5-9-сы кластарҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәтен өйрәнгәндә уҡыусыларҙың дөйөм телмәр үҫеше стимуляциялана; коммуникатив мәҙәниәте үҫә; дөйөм ҡиммәттәргә ориентацияһы формалаша һәм дәрестә аралашыу процесында, текстар менән танышҡанда әхләҡи тәрбиә нигеҙҙәре барлыҡҡа килә;

1 Уҡытыусы уҡыған йәки һөйләгән, үҙең уҡыған тексты аңлай алыу;

2 Уҡыған әҫәр, картина, экскурсия, ҡараған фильм буйынса әңгәмәлә ҡатнашыу;

3 Предметты, күренеште элементар рәүештә һүрәтләү, уға үҙ мөнәсәбәтеңде белдереү;

4 Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙе, поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән һөйләү;

5 8 – 10 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү;

6 Тексты шыма, аңлы, дөрөҫ, тотош һүҙләп уҡыу, логик баҫымдарҙы, паузаларҙы дөрөҫ әйтеү; тасуири уҡыу; тексттың өлөштәренә, иллюстрацияларына исем биреү, өҙөк буйынса план төҙөү; текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе, һүрәтләү, тасуирлау сараларын табыу, мәғәнәләрен аңлатыу, һүҙлектәр менән эш итеү;

7 Хикәйә, әкиәт, мәҡәл, йомаҡ жанрҙарын практик айыра белеү;

8 Текст, күҙәтеүҙәр йәки экскурсия буйынса һорауҙарға яуап яҙыу; Өйрәтеү характерындағы изложение, иншалар яҙыу; яҙғанды элементар формала камиллаштыра алыу.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте курсы дөйөм белем биреү мәктәбенең предметтар системаһында донъяны танып белеү һәм социомәҙәни маҡсаттарҙы тормошҡа ашыра.

Донъяны танып белеү маҡсаттары уҡыусыларҙы тел һәм әҙәбиәт тураһындағы фәндең төп нигеҙҙәре менән таныштырыуҙы һәм уның менән бәйләп уларҙың билдә- символдар ярҙамында ҡабул итеүен, логик фекерләүен , күҙ алдына килтерә алыуын формалаштырыуҙы аңлата.

Башҡорт телен, әҙәбиәтен өйрәнеүҙең социомәҙәни маҡсаттары кешенең дөйөм мәҙәнилеге үҫеше күрһәткесе булараҡ, уҡыусының коммуникатив компетенцияһын, һөйләү һәм яҙма телмәр үҫешен үҙ эсенә ала.

5-9 кластарҙа башҡорт теле һә әҙәбиәтен өйрәнгәндә уҡыусыларҙың дөйөм телмәр үҫеше стимуляциялана, аралашыу мәҙәниәте үҫә, дөйөм ҡиммәттәргә ориентацияһы формалаша һәм дәрестә аралашыу процесында, балалар фольклоры үрнәктәре һәм текстар менән танышҡанда әхләҡи тәрбиә нигеҙҙәре барлыҡҡа килә, сит мәҙәниәткә ҡарата толерантлыҡ формалаша.

етында түбәндәге йөкмәтке линияларын билдәләп була:

телмәр эшмәкәрлегенең төп төрҙәрендә коммуникатив оҫталыҡтар;

тел саралары һәм уларҙы ҡулланыу күнекмәләре;

социомәҙәни компетенция;

дөйөм уҡыу һәм махсус уҡыу оҫталыҡтары.

Коммуникатив оҫталыҡтар.

Һөйләү телмәре

Диалогик форма:

типик ситуацияларҙа диалог алып барыу;

һорау-яуап рәүешендәге диалог.

Монологик форма:

- телмәрҙең төп коммуникатив төрҙәрен (хикәйәләү, ҡылыҡһырлау) ҡулланыу.

**Тыңлап аңлау**

- уҡыусының уҡытыусы һәм класташтарының телмәрен аңлауы;

өйрәнелгән тел материалына таянып эшләнгән аудиояҙмалағы ҙур булмаған текстарҙы аңлау.

**Уҡыу**

башҡорт теле материалына таянып эшләнгән ҙур булмаған текстарҙы ҡысҡырып уҡыу;

өйрәнелгән материалды һәм бер нисә яңы һүҙҙе үҙ эсенә алған тексты эстән уҡыу һәм аңлау, текстан кәрәкле информацияны табыу (персонаждарҙың исемдәре, географик атамалар һ.б.).

**Яҙыу**

текстан һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу оҫталығы;

яҙма телмәр нигеҙҙәре: байрам менән ҡотлау, ҡыҫҡа шәхси хат яҙыу.

**Уҡыусыларҙың ҡаҙаныштарын баһалау**

Мәғлүмәт сығанаҡтары:

- уҡыусылар эшмәкәрлеге;
- статистик мәғлүмәттәр;
- уҡыусыларҙың эштәре;

Методтар:

- күҙәтеү;
- яуап һайлау;
- ҡыҫҡа яуап;
- башҡарыу процесын баһалау;
- башҡарыу процесын һәм һөҙөмтәһен баһалау;

Критерийҙар;

- баһалау ысулдарының дөрөҫлөгө;
- ҡуйылған баһаны тикшерә белеү;
- уҡыуҙың дөрөҫлөгө;

- уҡыуҙың темпы;
- әңгәмәлә ҡатнашыу;
- яуаптың дөрөҫлөгө;
- яуаптың һәм баһаның төплөлөгө.

**III.Уҡыу предметының уҡыу планында урыны**

Уҡыу планында башҡорт дәүләт телен уҡытыуға 5 класта -1
6 класта -1
7 класта -1
8 класта-2
9 класта -2 сәғәт бүленгән (34 уҡыу аҙнаһы).

**Уҡыу предметын үҙләштереүҙең шәхсән, метапредмет, предмет һөҙөмтәләре**

**Уҡыу предметын өйрәнеүҙең һөҙөмтәләре.**

Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен 5-9 кластарҙа өйрәнеүҙең **шәхси һөҙөмтәләренә** түбәндәгеләр инә:

-үҙеңде илдең гражданины итеп тойоу;
-телде (шул иҫәптән башҡорт телен) төп аралашыу сараһы булараҡ ҡабул итеү;
-дөрөҫ һөйләү теле һәм яҙма тел кещенең индивидуаль мәҙәнилеге күрһәткесе;
-башҡортса үткәрелгән саралар ярҙамында уҡыусының башҡорт халҡының тормошо менән танышыуы

**Метапредмет һөҙөмтәләр:**

-уҡыусының коммуникатив һәләттәрен үҫтереү; элементар коммуникатив мәсьәләне сисеү өсөн адекват тел һәм телмәр сараларын һайлау һәләтен үҫтереү;
-5-9 класс уҡыусыларының танып белеү һәм эмоциональ сфераларын үҫтереү; башҡорт теле һәм әҙәбиәтен өйрәнеүгә мотивация булдырыу;
-уҡытыу-методик комплекстың төрлө компоненттары (дәреслек, аудиодиск һ.б.) менән эшләргә өйрәтеү.

**Предмет һөҙөмтәләре:** башҡорт теле нормалары -фонетика һәм орфоэпия, башҡорт әҙәби теле, һүҙ төркөмдәре, ябай һөйләм һәм ҡатмарлы һөйләм төрҙәре, синтаксисы һәм пунктуация, һүҙбәйләнеш һәм һөйләм. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Синтаксик-стилистик күнегеүҙәрҙе башҡарыу. Фольклор әҫәрҙәренән һуң башҡорт яҙыусылары һәм шағирҙарының туған тел, тыуған ер, дуҫлыҡ, хеҙмәт, ил яҙмышы, азатлыҡ өсөн көрәш темаларына арналған иң күренекле әҫәрҙәре үҙләштереү.

**Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү**: танып белеү, шәхси, ойоштороу һәм коммуникатив эшмәкәрлек. Шәхси эшмәкәрлек баланы уҡымышлы һәм аңлы шәхес итеп үҫтереү. Эшмәкәрлекте унын тормош һәм кешелеклелек ҡиммәттәрен, әхлаҡи һәм мораль нормаларҙы аңлап ҡабул итеүеп, әйләнә- тирәләге күренештәргә һәм ваҡиғаларға шәхси ҡарашын формалаштырыуға йүнәлтеү.

**Ойоштороу эшмәкәрлеге** танып белеү процесы менән идара итеүҙе күҙ уңында тота: эшмәкәрлекте күҙаллау, планлаштырыу, башҡарыу, тикшереү, үҙгәрештәр индереү һәм баһалауҙы үҙ эсенә ала.

**Аралашыу (коммуникатив) эшмәкәрлеге** белем алыу процесында аралашырға өйрәнеүҙе ойоштороуға йүнәлтелгән. Ул башҡа кешеләрҙе тыңлай белеү һәм аңлауҙы, мәғлүмәтте теүәл тапшырыуҙы үҙ эсенә ала.

**Предмет кимәле**. Уҡыу предметын өйрәнеүҙә яңы белем үҙләштереү, уны эшкәртеү һәм ҡулланыу өлкәһендә тейешле тәжрибә туплау.

**ИКТ-кометентлығы.** Компьютер технологияларының өҫтөнлөгө - күргәҙмәлелек, мәғлүмәттәрҙең график һүрәтләнеш (текст, төшөрөлгән графика, слайдтар, реалистик

һүрәттәр), стереотауыш (музыка, төрлө тауыштар), анимация (һәрәкәтсән һүрәттәр, видео) берлегендә бирелеүе.

Компьютер ярҙамында башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә бер төркөм дидактик мәсьәләләрҙе хәл итеп була: лексиканы өйрәнеү (компьютер һүҙлектәрен файҙаланыу); дөрөҫ әйтелеш өҫтөндә эш (башҡорт теле дәреслектәрен, тауыш яҙыу программаларын файҙаланыу); орфографик күнегеүҙәр (орфографик һүҙлекте һәм компьютерҙың орфографияны тикшереү программаһын файҙаланыу); грамматик күренештәрҙе үҙләштереү (тестар ярҙамында); эҙләнеү процесында яңы мәғлүмәт алыу, һөйләү телмәрен үҫтереү, һөйләмдәр һәм текстар төҙөү, редакторлау һ.б.

**Проектлау технологияһы** - педагогик процесты планлашырыуҙа ҡулланыла торған үҙенсәлекле методик система.

Проектлау технологияһының төрҙәре:

-уйын проекты;

-эҙләнеү поекты;

-ижади проект;

-информацион проект;

-логик-мәғәнәүи модель (ЛМН).

Проект методы уҡыусының ихтыяр көсөн, ижади мөмкинлектәрен үҫтереүгә булышлыҡ итә, уҡыусылар фәнни-тикшеренү эшенә йәлеп ителә. Проет эше уҡыусының интеллектуаль үҫешен тәьмин итә, уның фекерләү һәләтен үҫтерә, үҙ эшенә баһа бирергә өйрәтә.

**Фәнни-тикшеренеү эше.**

Фәнни-тикшеренеү эшен заманса уҡыу-уҡытыу технологияһы һәм аң-белем, ғилем алыуҙа уҡыусы менән уҡытыусының ижади хеҙмәттәшлеге итеп билдәләп, уҡыусыларҙы фәнни эш менән шөғөлләнергә өйрәтеү бурыстарын билдәләйбеҙ:

-балаларҙа һәр нәмәгә иғтибар менән ҡарау, ҡыҙыҡһыныу, эҙләнеү теләген арттырыу; ихтияр көсөн үҫтереү; йәш үҙенсәлектәренә тура килгәнсә, күңелгә яҡын ниндәйҙер күңелгә яҡын ниндәйҙер бер фән буйынса тәрәнерәк белем алыу мөһимлеген зиһенгә һеңдереү, ижади эшләү һәләтен үҫтереү;

-уҡыусыларға уйланырлыҡ, фекер йөрөтөрлөк,хыялдарын уятырлыҡ яңы һәм ҡыҙыҡлы мәғлүмәт алырға ярҙам итеү; донъяға ҡараштарын киңәйтеү;

-ҡыйыулыҡ, аныҡ фекерләү тәрбиәләү; һүҙ байлығын үҫтереү; алға ҡуйған маҡсатҡа өлгәшеү алымдары менән таныштырыу;

-фәнни-тикшеренеү эше менән шөғөлләнергә йәлеп итеү; уның методикаһын үҙләштереү, практик күнекмәләр алыу ваҡытында фәнни культуралар тәрбиәләү;

-мәктәптә фәнни-тикшеренеү эше менән шөғөлләнеүҙең теоретик һәм практик нигеҙҙәрен булдырыу.

**Аңлы уҡырға өйрәтеү һәм текст менән эш.**

Аңлы уҡыу - текстың йөкмәткеһен тулыһынса үҙләштереүҙе талап итә. Текст ашыҡмайынса, һәр абзац ентекләп уҡыла, аңлашылмаған урындар ҡабаттан уҡып сығыла. Уҡыусыларға уҡыу өсөн практик яҡтан әһәмиәтле текстар тәҡдим итеү: рецепттар, эпистоляр текстар (хаттар, ҡотлау открыткалары, әҙәби әҫәрҙән өҙөктәр, комикстар, әкиәттәр, төрлө белдереүҙәр. Аңлы уҡырға өйрәткәндә түбәндәгеләргә иғтибар итеү:

-текстың темаһын билдәләү;

-коммуникатив бурысты асыҡлау;
-микротемаларға бүлеү;
-график моделләштереү.

Аңлы уҡырға өйрәтеү - телмәр эшмәкәрлегенең мөһим этаптарының береһе. Уҡытыу маҡсатынан сығып, уҡытыусы дәрескә төрлө эштәрҙе һайлап ала, уҡыу техникаһын, уҡыу күнемәһен үҫтереү өстөндә сичтемалы эш алып барыла.

**А.** Коммуникатив сферала (башҡорт теле һәм әҙәбиәтен туған тел булараҡ өйрәнеүҙә)

Телмәр эшмәкәрлегенең түбәндәге төрҙәрендә телмәр компетенцияһы:

һөйләү телмәрендә:

- аралашыуҙың типик ситуацияларында этикет диалог алып барыу;
- уҡыусының предмет, картинаны һүрәтләүе; персонажды ҡыҫҡаса ҡылыҡһырлауы һәм әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен һөйләп биреү;

тыңлап аңлауҙа:

-уҡыусының уҡытыусы һәм класташтарының телмәрен тыңлап аңлауы; аудиояҙмаларҙағы текстарҙың, әҙәби әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен аңлауы һәм һөйләүе;

уҡыуҙа:

- әҙәби әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен ҡысҡырып уҡыу, аңлау һәм ҡыҫҡаса һөйләү;
- өйрәнелгән тел материалы менән бер рәттән яңы һүҙҙәрҙе лә үҙ эсенә алған текстарҙы эстән уҡыу һәм уларҙың төп йөкмәткеһен аңлау, текстан кәрәкле информацияны табыу;

яҙма телмәрҙә:

- яҙыу техникаһына эйә булыу;
- уҡылған әҫәрҙәр буйынса бәләкәй хикәйә төҙөү;

Тел компетенцияһы (тел сараларын үҙләштереү).

- башҡорт әҙәбиәтендә тексты дөрөҫ итеп аңлап уҡыу; һүҙҙәргә һәм фразаларға дөрөҫ баҫым ҡуйыу;
- төрлө һөйләм төрҙәрен айыра белеү, телмәрҙә ҡулланыу;
- фонетика һәм орфоэпия, башҡорт әҙәби теле, һүҙ төркөмдәре, ябай һөйләм һәм ҡатмарлы һөйләм төрҙәре, синтаксис һәм пунктуация, һүҙбәйләнеш һәм һөйләм төрҙәрен практик рәүештә ҡулланыу. Синтаксик- стилистик күнегеүҙәрҙе башҡарыу..

Социомәҙәни компетенция.

- географик атамаларҙы, билдәле яҙыусыларҙың әҫәрҙәренең исемдәрен, персонаждарын белеү, уларға характеристика биреү

**Б.** Танып белеү сфераһы:

- айырым өндәр, хәрефтәр, һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, ябай һәм ҡатмарлы һөйләмдәр кимәлендә башҡорт теле һәм әҙәбиәтендә күренештәрҙе сағыштыра белеү;
- 5-9 класс тематикаһы кимәлендә күнегеүҙәр эшләй белеү;
- ҡағиҙәләр, таблицалар,һүҙлектәр менән эш итеү;
- өйрәнелгән тел материалы менән бер рәттән яңы һүҙҙәрҙе лә үҙ эсенә алған текстарҙы эстән уҡыу һәм уларҙың төп йөкмәткеһен аңлау, текстан кәрәкле информацияны табыу
- үҙ-үҙенде 5-9 класс уҡыусыһы кимәлендә баһалай белеү;

**В.** Дөйөм ҡиммәттәргә йүнәлеш сфераһында:

- башҡорт теле һәм әҙәбиәте әҫәрҙәре ярҙамында башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү.

**Г.** Эстетик сферала:

- башҡорт телендәге хис-тойғо һәм эмоцияларҙы белдереүсе сараларҙы үҙләштереү;

- башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәре менән танышҡанда персонаждарға, ваҡиғаларға ҡарата үҙ фекереңде әйтә белеү.

**Д.** Хеҙмәт сфераһында:

- уҡыу процесында билдәләнгән планға ярашлы эшләй белеү.

**Төп йөкмәтке линиялары.**

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте курсында түбәндәге йөкмәтке линияларын билдәләп була:

- телмәр эшмәкәрлегенең төп төрҙәрендә коммуникатив оҫталыҡтар;
- тел саралары һәм уларҙы ҡулланыу күнекмәләре;
- социомәҙәни компетенция;
- дөйөм уҡыу һәм махсус уҡыу оҫталыҡтары.